*Ҡәҙриә ҒӘЗИЗОВА*

# ЙЫРҘАРЫНАН МОҢДАР ТҮГЕЛӘ



*Башҡортостанда эстрада иң үҫешкән сәнғәт төрҙәренән иҫәпләнә. Башҡорт эстрадаһында Фәриҙә Ҡудашева, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Абдулла Солтанов, Рамазан Йәнбәков кеүек маһир йырсыларға алмашка килеүсе талантлы йәш йырсыларҙың байтаҡ булыуы ҡыуандыра. Йырға, моңға һөйөү халыҡ йырҙарына, халҡыбыҙға ихлас ихтирам булып үҫә. Ошондай эстрада йондоҙҙары араһында үҙенә генә хас моңо, һәр кемдең күңелен арбарлыҡ йырҙары булған Гөлсөм Бикбулатова ла бар.*

..."Урал моңо" йыр фестивале бара. Сәхнәлә — ҡап-ҡара ҡалын сәс толомдары биленән түбән төшөп торған үҫмер ҡыҙ "Таштуғай"ҙы йырлай. Илаһи саф моң күңелдәрҙе арбай, тетрәндерә, ул ғына ла түгел, ҡайҙалыр әйҙәй, алыҫ йыһанға, сикһеҙ даръяға алып китә...

Гөлсөм Бикбулатованы мин тәү тапҡыр ошонда күрҙем, беренсе тыңланым. Гөлсөм — Сибай педагогия колледжы студентҡаһы — тыңлаусыларҙы моңло тауышы, башҡа йәштәрҙән айырмалы рәүештә, үҙен сәхнәлә баҫалҡы, әҙәпле тотоуы менән һоҡландырғайны.

Ошо бәйгенән һуң ул ишетелмәйерәк торҙо ла, ҡапыл балҡып, баш ҡалабыҙ Өфө сәхнәһенә килеп сыҡты. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, уның халыҡ йырҙарын өйрәнергә тырышыуы, уларҙы ҙур оҫталыҡ менән башҡарыуы ҡыуандырҙы. Әлбиттә, был тырышлыҡ, ныҡышмаллыҡ һөҙөмтәһе. Әммә кешенең таланты, тәбиғи моңо мотлаҡ тыуған еренән, эскән һыуынан килә.

Гөлсөм Башҡортостаныбыҙҙың иң гүзәл, сихри тәбиғәтле төбәктәренең береһе — Йылайыр районы Мәксүт ауылында ун икенсе бала булып донъяға килгән. Вәлиулла ағай менән Шәмсинур апайҙарҙың ишле ғаиләһендә, уларға шатлыҡ, һөйөнөстәр өҫтәп, йырсы һандуғас булып үҫә. Ихтирамға лайыҡ, хөрмәтле кешеләр Гөлсөмдөң атаәсәләре. Бөгөнгө көндә улар, балаларының уңыштарына ҡыуанып,

шатлыҡлы ғүмер кисерә. Шулай булмай һуң: ағалары Әсҡәт менән Ринат аталары юлын һайлаған — улар урман хужалары, Гүзәлиә менән Бикә — медицина хеҙмәткәрҙәре (шәфҡәт туташтары), Зилә менән Зөлфирә — уҡытыусылар, Сулпан юридик белем алған, шул өлкәлә эшләп йөрөй, Флүзә — техник һөнәр эйәһе, ә бына кескәйҙәре Гөлсөм бөтә республикаға танылған йырсы һәм актриса.

Йырсы булыу теләге Гөлсөмгә бәләкәйҙән килгәндер, сөнки атаһы Вәлиулла ағайҙың ҡустыһы — танылған йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Фәрит Бикбулатов улар йортонда һәр саҡ көтөп алынған ҡунаҡ була. Ә Фәрит ағай булған ерҙә йырһыҙ-моңһоҙ тормош юҡ. Халыҡ йыры, халыҡ моңо Фәрит ағаһы йырлағанда нескә күңелле ҡыҙ бала йөрәгенә үтеп инә, илаһи моң булып сорнай. Үҙе тураһында күп һөйләргә яратмай Гөлсөм, ә күренекле йырсылар тураһында һүҙ сыҡһа, уның ҡапҡара күҙҙәренән осҡондар сәсрәгәндәй. Ул Мәғәфүр Хисмәтуллин, Әсмә Шәйморатова, Сөләймән Абдуллин, Абдулла Солтановтарҙың башҡарған һәр йырын, бөтә репертуарын яттан белеп, улар тураһында илһамланып һөйләй башлай.

— Мин ошо маһир йырсыларҙы тыңлап, улар моңонда тирбәлеп үҫтем, — ти Гөлсөм. — Бәләкәй саҡта йыш ҡына ауыл эргәһендәге ”Сәлим ташы” тип йөрөтөлгән ергә бара торғайным. Ниндәйҙер сәйер көс мине шунда әйҙәй ине. Был атаманың легендаһын да асыҡлап белдем.

Ә легендаһы былай: Сәлим исемле бик ҡыйыу бер егет, ошонда көн



*Гөлсөм Бикбулатова ”Таштуғай”ҙы башҡара*

иткән байҙарҙың малдарын ҡыуып алып китеп, ярлыларға таратып бирер булған. Уны бур-ҡараҡ тип эҙәрлекләй башлағас, ошо таш ҡая мәмерйәһенә инеп йәшенгән, шунда йәшәгән. Ә бер көндө үҙен ҡамап ала башлағас, Сәлим аты менән ошо ҡаянан һикергән... Таш эргәһенә килгәндә миңә һәр ваҡыт ошо тау-таш араһынан мөһабәт һынлы егет, атын етәкләп, ҡаршыма килеп сығыр һымаҡ тойола ине. Әле лә, ауылға ҡайтһам, ”Сәлим ташы”на бармай киткәнем юҡ, ә егет һаман мине ҡаршыламай, — тип йылмая Гөлсөм. — Миңә бала саҡтан ишетелгән тауҙар моңо, ҡаялар шауы һаман туҡтамаған. Ул көй элеккесә минең ҡолағымда, күңелемдә, йөрәгемдә ағыла ла ағыла...

Сибай интернат-гимназияһын тамамлағас, ул, ата-әсәһенең кәңәше

буйынса, Сибай педагогия колледжына уҡырға инә. Әммә күңеленә ояланған сихри моңдан, йырҙан башҡа йәшәй алмай Гөлсөм. ”Йәш йондоҙсоҡтар”, ”Ирәндек моңдары” фестивалдәрендә ҡатнашып, юғары баһа ала, ”Ирәндек моңдары” бәйгеһендә Гран-при яулай. Тап ошо ваҡытта Сибай филармонияһы етәкселәре, ҡыҙҙың талантын күреп, концерттарға саҡыра башлайҙар. Уҡыуын тамамлағанда Гөлсөм республика кимәлендә популярлыҡ яулаған йырсы булып танылала. Сәнғәткә, йырға булған һөйөүе ҡыҙҙы Өфө дәүләт сәнғәт институтына (хәҙер академия) алып килә. Гөлсөм актерҙар бүлегендә уҡый башлай.

— Ниңә театр бүлегенә уҡырға индең, һин бит йырсы булырға хыялланғанһың? — тип һорайым Гөлсөмдән.

— Мин йырлай торған театр актерҙарына ла үлеп ғашиҡ инем. Нурия Ирсаева, Фидан Ғафаров, Илсөйәр Ғәзетдинова, Суфия Ҡорбанғәлиеваларҙың ижады мине шул тиклем йәлеп итә торғайны. Бигерәк тә Нурия Ирсаева менән Фидан Ғафаровтарҙың ”Тиле йәшлек”, ”Ғәлиәбаныу”, ”Тапшырылмаған хаттар” спектаклдәрендәге йырҙарын мин көндәр буйы тыңлай алырмын һымаҡ ине. Уларҙа — мөхәббәт, сафлыҡ, ихласлыҡ, илаһилыҡ.

Бына ошо хыялы тормошҡа аша Гөлсөмдөң: ул 2004 йылда уҡытыусылары Таңсулпан Бабичева һәм Азат Нәҙерғоловтар курсын тамамлап, Милли йәштәр театрына эшкә килә. Дөрөҫ, әлегә уның ҙур ролдәре юҡ, әммә өмөтлө киләсәге алда йәш актрисаның. Бына әле йәш режиссер И.Муллабаев С.Суринаның ”Алтын балта” исемле әкиәтен сәхнәләштерә. Унда Гөлсөм Көнһылыу ролен уйнаясаҡ.

Йәш булыуына ҡарамаҫтан, Гөлсөмдөң йыр репертуары бай һәм йөкмәткеле. Унда халҡыбыҙҙың моңынйылары ”Таштуғай”, ”Ғилмияза”, ”Зөбәйҙә”, ”Илсе Ғайса” менән бергә, күптәрҙең күңел түрендә урын алған заман йырҙары ла байтаҡ. Әйтәйек, үҙе һүҙҙәрен оҡшатып махсус көй яҙҙырып алған ”Йәш ғүмерҙәр” (Зәлифә Ғилмитдинова һүҙҙәре, Юлай Үҙәнбаев көйө) әле иң популяр йырҙарҙың береһе һанала. Уны Башҡортостанда ғына түгел, күрше өлкәләрҙә лә яратып йырлайҙар, ихлас тыңлайҙар. Был моңло йыр беренсе булып Гөлсөм Бикбулатова башҡарыуында яңғыраны һәм халыҡ күңелендә лайыҡлы урын алды, башҡа йырсыларға ла ифрат оҡшаны. Башҡортостан радиоһының ”Юлдаш” каналында, ”Шәреҡ” радиоһында яңғыраған музыкаль тапшырыуҙарҙа, ”Йәш ғүмерҙәр” йыры Гөлсөм башҡарыуында яңғыраһын ине, тигән үтенестәр йыш осрай. Уның ”Йөрәк сере” (халыҡ йыры), ”Ҡөттөрмә” (Риф Арыҫлан көйө, Гөлнара Рәшитова һүҙҙәре), ”Эй, егетем, ҡара күҙ” (Гөлдәр Ишҡыуатова көйө, Гөлшат Зөлҡәрнәева һүҙҙәре) йырҙарын да йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә яратып тыңлай.

Ә буш ваҡыттарында ул үҙенең йыр репертуарын байытыу өҫтөндә эшләй. ”Урал моңо”, ”Ирәндек моңдары”, ”Гәлсәр һандуғас”, ”Актер йыры” фестивалдәрендә лауреат исемдәрен, Гран-при яулаған Гөлсөм Бикбулатова беҙҙе тағы ла матурыраҡ йырҙары, сәхнә уңыштары менән шатландырыр әле, тип уйларға урын бар.

Афарин, Гөлсөм, шулай булһын! Уңыштар һиңә.